*Зөһрә АЛТЫНБАЕВА*

# Йондоҙ шулай ҡабына



*Башҡортостандың халыҡ артистҡаһы Светлана Хәкимова*

...Дим буйы гөрләп тора: яр буйлап киртләс-киртләс итеп эскәмйәләр теҙелгән. Ситтән ҡараһаң, боронғо Грециялағы амфитеатр күҙ алдына баҫа. Бөгөн Яңы Ҡайыпта байрам — Сибай театры килгән. Йәштәр генә түгел, ҡарт-ҡоро, бала-саға — барыһы ла көтөү ҡайтҡанын ғына көтә. Бер аҙ башҡүҙ алыуға йылға буйы шау-гөр килә башлай. Светлана ла әхирәттәре менән шунда. Театрҙың иң абруйлы актерҙары унық нәнәйҙәренә (был яҡтарҙа өләсәйгә шулай өндәшәләр) фатирға төшкән, шуға ҡапҡа эргәһендә торған билет һатыусы уҫал апайға Закир ағай Ханов яҙып биргән ҡағыҙҙы тоттторҙо ла, эре генә үтеп тә китте.

Театр. Сихри донъя. Ғишыҡ утында янған Йософ һәм Зөләйха. Күңел түрендә кешелекте беректереп тотҡан һөйөү хисе әле яңы бөрөләнә башлаған йәш ҡыҙҙың күҙе лә, күңеле лә сәхнә түрендә. ”Эх, ошо артистар кеүек матур булһаң, улар кеүек килештереп уйнаһаң ине”. Светлана өсөн сәхнәлә артистар түгел, йондоҙҙар балҡый төҫлө тойола.

Светлана — Дим һылыуы. Ул Әлшәй районы Иҫке Ҡайып ауылында тыуған. Дим-Һарайтау тигән ҙур исемде йөрөткән бәләкәй генә ауылда башланғыс мәктәпте тамамлағандан һуң Раевка ҡасабаһында урта мәктәпкә йөрөп уҡый. Эйе, ҡышын да, яҙын да ете-һигеҙ саҡырым араны көнөнә ике тапҡыр таҡырлай ул тиҫтерҙәре менән. Күмәк булғас, юл оҙонлоғо һиҙелмәй ҙә, күрәһең. Барып еткәнсе шау-гөр киләләр, ҡайтып еткәнсе тағы. Өҫтәүенә, тирә-йүндәге тәбиғәттең хозурлығы йөрәктәрҙе елкендерә, хисләндерә: бар булмышы моңға тулған Дим, исемдәре күңелдәргә бер аҙ шик-шөбһә һалған Айыу күле, Бүре күле...

Йәшлек — дәртле, дарманлы мәл. Өйгә ҡайтып, тамаҡ ялғап алыуға осо ла, ҡырыйы ла булмаған йорт мәшәҡәттәре башлана. Уларын бер яйға килтереүгә, дәрес әҙерләргә кәрәк. Инде арып-талып йоҡоға талырға торғанда, ауыл урамында гармун тауышы ишетелә... Нисек йоҡлап ятһын инде Светлана?! Күңелендә урғылған хис-моңдары ошо гармун тауышына эйәрә. Дуҫтары уның йырлағанын, өйөрөлөп-осоп бейегәнен ихлас ярата. ”Һин булмаһаң, йәм юҡ”, — тиҙәр. Йыш ҡына күрше ауыл егеттәре лә килә. Ана, теге дәртле гармунсы егет Хәмиз тағы

килгән. Светлана һиҙә уның үҙенә күҙ һалып йөрөгәнен. Шәп егет. Өфөлә Ғәзиз Әлмөхәмәтов исемендәге музыка мәктәбендә уҡый, тиҙәр. Иң ҡыҙығы: Хәмиздең ата-әсәһе менән Светлананың ата-әсәһе бик дуҫтар. Осрашһалар, һөйләшеп һүҙҙәре бөтмәй. Егеттең ат яратҡанын, бик уңған, оҫта баянсы булыуын да улар аша белде Светлана.

Хәмиз Светлананың йырлағанын, шиғыр һөйләгәнен тыңларға әүәҫ. Осрашһалар: "Әйҙә, берәй шиғыр һөйлә әле", — тип аптырата. Тыңлай-тыңлай ҙа, хисләнеп китеп: "Һиңә мотлаҡ артистка булырға, Өфөгә сәнғәт институтына барырға кәрәк", — тип дәртләндерә. Ә Светлана үҙен ябай ауыл ҡыҙы тип һанай. Уның уйынса, артисткалар иҫ китерлек сибәр, оҙон, зифа буйлы, сөм ҡара толомло булырға, матур кейенергә тейеш. Ана, ҡыҙҙар береһенән-береһе уҙҙырып фотоларын йыйған артисткалар ниндәй: Элина Быстрицкая, Людмила Чурсина һәм башҡалар һоҡланып туйғыһыҙ бит. Ә нисек оҫта уйнайҙар!

Нисек кенә булмаһын, Хәмиздең дәрт өҫтәгән һүҙҙәре тәьҫир иткәнме, әллә күңеленең иң түрендә урын алған хыялы ҡанат ҡаҡҡанмы, Светлана сәнғәт хаҡында йыш уйлана башлай. Әммә әлеге лә баяғы ҡыйыулыҡ тигән нәмәнең үҙен урап үтеүе ҡамасаулай: нисә тапҡыр инде Өфөгә барып, үҙен әйҙәп торған сәнғәт институтының ишек тотҡаһына үрелгән ерҙән кермәйенсә ҡайтып китә. Ике сәғәт буйы электричкаға ултырып бара, юл буйына үҙенә ҡыйыу булырға ҡуша, ә бына институт ҡаршыһына етһә, ҡаушай ҙа ҡуя. Шулай ҙа яҙмыш барыбер етәкләп килтерә Светлананы үҙе һайлаған юлға. Институтта иң һәләтле, иң иғтибарлы педагог Ғабдулла Ғиләжев үҙ курсына ала уны. Дәртләнеп уҡырға тотона Светлана. Йәшлек үҙенекен итә, шул уҡ йылда һөйгәне Хәмиз менән матур ғаилә ҡороп йәшәй башлайҙар. 1-се курста уҡығанда уҡ улдары Рәмис тыуа. Уҡырға ла, йәш баланы ла ҡарарға өлгөрөү мөмкин түгел. Светлана институтты ҡалдырып торорға, үҙен бала тәрбиәләүгә арнарға ҡарар итә.

Ошо ниәтен әйтергә тип остазы Ғабдулла Ғиләжевҡа инһә, ул ҡыҙға уҡыуын ташламаҫҡа, өлгөргән тиклем имтихандарын тапшырыуҙы дауам итергә кәңәш бирә.

— Мин Ғабдулла Ғабдрахман улына әле лә оло рәхмәтлемен, — ти Светлана. — Әгәр шул мәлдә ул ихлас кәңәштәре менән ярҙам итмәһә, минең яҙмышым, бәлки, бөтөнләй икенсе йүнәлеш алыр ине. Улым бер аҙ үҫә төшкәс, уҡыуымды дауам иттем. Әйткәндәй, институтты мин Алмас Әмиров, Рәсүл Ҡарабулатовтар менән бергә тамамланым. Уҡығанда Мостай Кәримдең "Ташлама утты, Прометей!" әҫәрен сәхнәләштергәйнек, унда мин — Агазия, Рәсүл Прометей ролдәрен башҡарҙыҡ. Институтта уҡытҡан уҡытыусыларыбыҙ ҙа, тамашасылар ҙа бик оҡшатҡайны беҙҙең уйнағанды. Тамара Шәһит ҡыҙы Хоҙайбирҙина, Ирина Николаевна Филиппова, Александр Сергеевич Дыба кеүек талантлы остаздарҙан маҡталыу үҙе бәхет бит. Артабан минең ижади үҫешемә Рифҡәт Вәкил улы Исрафилов, Таңсулпан Даһи ҡыҙы Бабичевалар ныҡ ярҙам итте. Уларға үтә лә рәхмәтлемен. Үҙебеҙҙең "Ә таңдар бында тыныс" диплом спектаклендә Четвертак ролен ихлас уйнаным. Әле байтаҡ йылдар үткәс тә ошо ролде, ошо мәлде һағынып иҫкә алам.

Институтта уҡыған сағында уҡ оҫталығы күҙгә бәрелеп торған Светлананы уҡыуын тамамлау менән Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театрына эшкә саҡыралар. Был 1980 йылда була. Театрҙың ул ваҡыттағы баш режиссеры Рифҡәт Исрафилов уға спектаклдәрҙә төп ролдәрҙе ышанып тапшырыуҙан ҡурҡмай. Әйтәйек, театрға килгәс тә тәүге роле Мирхәйҙәр Фәйзиҙең ”Ғәлиәбаныу” спектаклендә Ғәлиәбаныу роле була. Үтә яратып, бар күңелен биреп башҡара был ролде Светлана. Үҙе ихлас ихтирам иткән абруйлы коллегалары Нурия Ирсаева, Фидан Ғафаров, Таңсулпан Бабичева, Олег Ханов, Хөрмәтулла Үтәшев һәм башҡаларҙан өлгө алып, өйрәнеп ижад итә. Артабан уға ”Тиле йәшлек”тә — Һандуғас, ”Ай тотолған төндө”лә — Зөбәржәт, ”Йәш йөрәктәр”ҙә Сәрби һәм башҡа ролдәрҙе ышанып тапшыралар. Һынатмай Светлана. Бөтә ролдәрен дә күңеле, йөрәге аша үткәреп, моңға сорнап, тамашасы күңеленә еткерергә тырыша.


”Аҫылйәр” спектакленән күренеш. Ләлә — Светлана Хәкимова, Шәрәф — Сәғиҙулла Байегет

Моңға сорнап, тип әйтеүем тиккә түгел: Светлананы тамашасылар драма актрисаһы тип кенә түгел, үҙенә генә хас моңло тауышлы йырсы булараҡ та белә. Уның йырҙары ялҡытмай, күңел түрендә урын алһа, ғүмерлеккә ҡала. Әйтәйек, ”Өфө тараҡтары” тигән йырҙы унан башҡа бер кем дә йырламай тиерлек. Йырлаһа ла, беҙ уны тик Светлана Хәкимова башҡарыуында ғына ҡабул итәбеҙ:

Өфө тараҡтары менән
Сәстәремде тарайым.
Әйлән әле тулған айға —
Бер туйғансы ҡарайым...

Ошо илаһи юлдар Светлананың моңло тауышына сорналып, күңелдәргә ҡуна, уйландыра, моңландыра. Инде бихисап йырсылар башҡарған ”Рамай”ҙы ла, ”Ауылым ҡайындары” һәм башҡа йырҙарҙы ла үҙенсә, үҙенә генә хас аһәң менән тыңлаусы күңеленә илтә белә Светлана.

Бер талантлы йырсы: ”Моң кешегә тыумыштан бирелә. Ул кешелә йә бар, йә юҡ. Моңһоҙ кешене училище, институт бөтөртөп кенә моңло итеп булмай. Булған моңдо байытырға ғына мөмкин”, — тигәйне. Был ысынлап та шулайҙыр. Светлана, мәҫәлән, үҙен белгәндән бирле йырлай.

— Бәләкәй сағымда мине ултырғысҡа баҫтырып йырлатҡандары хәтерҙә, — ти ул. — Мәктәптә лә уҡытыусылар гелән йырларға ҡуша ине. Йырҙарҙы тиҙ ота торғайным. Бер тапҡыр Башҡортостан телевидениеһының ”Йәйғор” тапшырыуына саҡырҙылар. Унда мин ”Шаулай урман” тигән йырҙы башҡарғайным. Телевидениены, диктор Зөһрә Бәхти-

зинаны тәү тапҡыр шунда күрҙем. Ошо мәлдә мин үҙемде тылсымлы, серле донъяға юлыҡҡандай хис иткәйнем.

Светлана үҙенең йырсылыҡ һәләтен өләсәһе Гөлбаныуҙан килә тип һанай.

— Нәнәйем бик һылыу, уңған кеше ине, — тип хәтерләй ул. — Ҡаҡса буйлы, оҙон сәсле, матур күңелле. Ҡартатайым менән емешеләк, йәшелсә үҫтерә торғайнылар. Крыжовниктары, алмалары бик уңа ине. Нәнәйем эш араһында гел генә йырлап йөрөй торғайны. Мин иһә унан отоп алырға тырышам. Ғөмүмән, бала саҡта һалынған ижад орлоҡтары күптәр өсөн уңышлы була икән. Әйтәйек, мәктәптә уҡығанда художестволы үҙешмәкәрлектә ҡатнашыуҙар, төрлө спектаклдәр ҡуйыу эҙһеҙ үтмәй. Шулай, үҫмер саҡта сәхнәгә ҡуйырға спектакль тапмағас, радио аша тапшырылған постановканы яҙып алып, шуны мәктәп ихатаһында сәхнә ҡороп уйнаған саҡтар әле лә иҫтә.

Ауылыбыҙҙа Һандуғас тигән әбей бар ине. Атай-әсәй берәй яҡҡа ҡунаҡҡа китер булһа, ошо Һандуғас әбейҙе беҙҙең өйҙә ҡалдыра. Ә ул бик күп бәйеттәр, мөнәжәттәр белә. Төн буйы һөйләтәбеҙ. Йә булмаһа, карауаттың шаршауын сәхнә итеп, ”артистка”лар булып китәбеҙ. Һандуғас әбейҙе лә йырлатабыҙ. Ул иһә боронғо халыҡ йырҙарын үҙенсә башҡарып ҡыуандыра.

Артистка ҡатын-ҡыҙға сәхнә менән ғаилә араһында өҙгөләнеүе еңелдән түгел, — тип дауам итә Светлана. — Сәхнәгә ихлас хеҙмәт итәйем, тиһәң, уға тулыһынса бирелергә кәрәк, сәхнә шуны талап итә. Артист булыу үтә ауыр хеҙмәт ул. Шуға күрә ижадында ҙур уңыштар яулаған, юғары планка тотҡан артистар һәм артисткалар алдында баш эйәм мин.

Театр үҙен, сәхнәне, коллегаларыңды яратыуҙан, ихтирам итеүҙән тора. Сөнки ул үҙе матурлыҡ, илаһи донъя. Матурлыҡ иһә һөйөү аша тыуа. Тимәк, актерҙар, режиссерҙар бер-береһен ихтирам итергә, үҙ-ара ихлас булырға тейеш. Тик шул саҡта ғына тамашасыны үҙенә ылыҡтырған, мәңге үҙенә әйҙәп торған сәхнә күрке — тамаша-тормош тыуа.

Бына шундай уйҙар, кисерештәр менән йәшәй Светлана. Үҙе матурлыҡҡа, камиллыҡҡа ынтылған кеүек, башҡаларҙа ла шуны күрергә тырыша.

Актриса. Йырсы. Светлана Хәкимова ошо ике талантты оҫта берләштереп ижад итә. Театр сәхнәһенә ул үҙ аураһы, үҙ моңо менән килеп сыға һәм спектакль ҡараусыны сорнап ала. Әйтәйек, ”Өҙөлгән туй”ҙа ул йырлағанда моңланмай, иламай ҡалыусы тамашасы һирәктер. Сөнки драма актрисаһы оҫталығы йырсы таланты менән ҡушылып, ғашиҡтар мөхәббәте төҫлө ғәжәйеп көскә эйә була.

*Светлана ире Хәмиз һәм улы Рәмис менән*



Әгәр Светлана драма актрисаһы булмайынса, йырсы һөнәрен

һайлаһа ла дан, шөһрәт яулар ине. Сөнки уның йыр тыңлаусы күңелен яулар моңо бар. Шуға ла йырҙары яҙылған аудиотаҫмалары, компакт дискы магазин кәштәһендә туҙанға күмелеп ятмай, сығыу менән таралып бөтә.

Күңел яраларын дауалар моң хужабикәһе ул Светлана Хәкимова. Һарытауҙа йәшәгән еҙнәһенең Башҡортостанға килгәнендә уның йырҙарын аудиотаҫмаға махсус яҙҙырып алып китеп тыңлауы үҙе ошоға бер дәлил. Башҡортостан радиоһы, телевидение эфиры аша ла йыш яңғырай Светлана Хәкимова башҡарған йырҙар. Әле ул халыҡ йырҙарынан ғына торған аудиотаҫма әҙерләргә ниәтләй. Үҙе ихлас яратып башҡарған ”Уйыл”, ”Ҡөйөлдө”, ”Рамай”, ”Сәлимәкәй” кеүек халыҡ йырҙары ынйыларын туплау теләге менән йәшәй.


*Кесе улы Ильяс*

— Әлбиттә, мин үҙемде йырсы, тип әйтергә ҡыймайым, — ти ул. — Әммә йыр — минең серҙәшем, дуҫым, юлдашым.

Шулай бер ваҡыт Сибай, Баймаҡ яҡтарында гастролдәр тамамланғас, ғәҙәттәгесә, һуңынан концерт күрһәттек. Билдәле булыуынса, Баймаҡ тарафтары йырсыларға, ғөмүмән, таланттарға бай яҡ. Сәхнәгә йырсы буларак сыҡҡанда күңелемдә нисегерәк баһаларҙар икән, тигән уйҙар булғайны. Әммә сибайҙар шул тиклем ихлас ҡабул итте, шатлығымдың сиге булманы.

Бына шундай ул Башҡортостандың халыҡ артисткаһы Светлана Хәкимова. Ябай, баҫалҡы, сибәр, талантлы. Уның спектаклдә уйнағанын, йырлағанын тыңлар өсөн генә тамашаға йөрөүселәр бихисап, ә актриса өсөн был үҙе оло баһа.

Актриса. Ҡатын. Әсә. Светлана йәшлек мөхәббәте Хәмиз менән татыу ғаиләлә ике ул үҫтерә. Өлкәне Рәмис, баян класы буйынса музыка мәктәбен тамамлап, әле Өфө сәнғәт академияһында уҡый. Бәләкәс Ильяс биш йәшлек егет булып үҫеп килә. Ул да ағаһына, атаһына оҡшап гармун, баян телдәрен баҫҡылай. Йыш ҡына атаһына эйәреп, уның оркестрҙа тынлы музыка ҡоралында уйнауын тыңларға ярата.

Уңған хужабикә лә Светлана. Ул бешергән аштарҙы ғаиләһендә генә түгел, бөтә ҡорҙаштары маҡтап бөтә алмай. Бишбармаҡ, былау, ҡуллама кеүек милли аштары ашап туйғыһыҙ, ҡамыр аштарын да үҙенсә яратып, матурлап бешерә.

Ҡыҫҡаһы, халыҡтың: ”Әгәр кешенең бер таланты бар икән, ул бар яҡлап талантлы”, — тиеүе тап уның хаҡында әйтелгән кеүек. Сәхнәлә дәртләнеп, илһамланып уйнай, йырлай белгән кеүек, тормоштан йәм, тәм табып, матур итеп йәшәргә ынтыла актриса. Алда иһә уны яңы ролдәр, яңы асыштар, табыштар көтә, шуға ышанып, киләсәккә яҡты өмөт менән йәшәй Светлана. Беҙ иһә уға күңеленә хуш килгән, тамашасылар ихлас ҡабул иткән, оҙаҡҡа хәтерҙә ҡалырлыҡ өр-яңы ролдәр, йырҙар теләйбеҙ.